"Батыр үҙе үлһә лә, даны үлмәй! "

# 112 –се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы



# М.М.Шайморатов



- 1941 йылдың ноябрь башында республика эшсәндәре башҡорт кавалерия дивизиялары төҙөү тураһында һорап,Дәүләт Оборона Комитетына мөрәжәғәт итәләр.Республика хеҙмәтсәндәренең теләктәрен хуплап,Дәүләт Оборона Комитеты ике милли дивизия (112-се, 113-се) төҙөргә рөхсәт иткән.
- Был дивизияларҙы төҙөү Өфөлә башлана. 112-се Баш.кав. дивизияның командиры итеп фронттан ҡайтарылған Миңлеғәли Минһажетдин улы Шайморатов билдәләнә. Республиканың колхоздары һәм совхоздары дивизия өсөн 13 мең ат, меңәрләгән центнер иген, фураж бирә. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы кейемдәр тегә.1942 йылдың апрелендә дивизия фронтҡа китә.

- Миңлеғәли Минһажетдин улы Шайморатов 1889 йылдың 15 авгусында Ҡырмыҫҡалы районының Биштәкә ауылында тыуған.Бәләкәйҙән үк ҡыйыу,тәүәккәл малай иптәштәре араһында уйындарҙы ойоштороп йөрөүсе була.Граждандар һуғышында ҡатнаша, Хәрби академия тамамлай.Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, полковник Шайморатов 112-се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы командиры итеп билдәләнә.
- Данлыҡлы дивизия Сталинградты ,Украинаны фашистарҙан азат иткәндә ҙур батырлыҡтар күрһәтә,бик күп юғалтыуҙар кисерә. Дивизияның ҡаһарман командиры, генерал- майор Миңлеғәле Шайморатов та 1943 йылдың 23 февралендә дошман тылына яһалған рейдтан сыҡҡанда батырҙарса һәләк була.Башҡорт халҡының данлы батыры Ворошиловград өлкәһенең Петровское ауылы янында ерләнгән.

# Утта янмай,һыуҙа батмай ,
# Һай ,батыр ҙа ир икән !



# Шайморатовҡа Өфө ҡалаһында ҡуйылған һәйкәл.




16bachkav.ucoz.ru

# Шайморатов командирҙар менән.




www.rutraveller.ru/Chaika777



Шайморатов ҡатыны Елена менән





Шайморатовтың
ҡыҙы Октябрина



Ейәне Сергей

# Шәжәрә

- Юлай Аҙналин(1730)-Салауат Юлаев(1754-1800)-Шатморат-Мөрсәлим(1756-1848)-Фәсихитдин (1802)-
- Фәхрилислам(1829)-Миңғазитдин (1866)-***Миңлеғәле Миңғазитдин улы Шайморатов*** (1899-1943)

# Иғтибарығыҙ өсөн Рәхмәт!

